***Рәмилә ЙҘҒҮҙИНА,***
***М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының әҙәби бүлек етәксеһе***



СССР-ҙың халыҡ артисткаһы
Гөлли Мөбәрәкова

# Һоҡланһындар өсөн яратылған...

Хоҙай һине, ахыры, һине шулай
Һоҡланһындар өсөн яратҡан.
Яратҡан да, ситтән ҡарап тороп,
Һоҡланғандыр үҙе аҙаҡтан.

Хәтеремдә, мин йәш егет инем,
Һин еткән ҡыҙ инең ул саҡта,
Һиңә күҙем төшөп йөрөй ине.
Тик үҙеңә генә ул хаҡта
Әйтә алманым. Түҙҙем. Тыйылдым.
Буйым етмәҫ төҫлө тойолдоң.

Инде хәҙер ир уртаһы булған
Һине күҙләп йөрөгән егеттәр.
Ә һин һаман шул уҡ,
һаман шул уҡ,
Шул ут күҙҙәр,
Шул уҡ керпектәр.
Тылсымлылар һаман...

Һине күргәс,
Мин тағы ла һиңә уҡталам.
Ялҡын эргәһендә туҡталғандай,
Барып етә алмай, туҡталам.

Мөмкин түгел яҡын бармауы ла,
Барыуы ла хәтәр, бик хәтәр...
Инде хәҙер һине күҙләп йөрөй
Миңә ҡусты тейеш егеттәр.

Минең инде йәшем үткән кеүек.
Үтер кеүек шулай күп йылдар,
Һиңә һаман һоҡланырҙар кеүек,
Һиңә һаман ғашиҡ булырҙар.

Хоҙай һине, ахыры, һине шулай
Һоҡланһындар өсөн яратҡан.
Яратҡан да, ситтән ҡарап тороп,
Һоҡланғандыр үҙе аҙаҡтан.

Был юлдарҙың авторы шағир һәм драматург Рафаэль Сафиндың шиғри рухын ғүмере буйы байытып, уға күпме гүзәл сәхнә образдары, шиғырҙар, поэмалар тыуҙырыуға илһам биргән Гөлли Мөбәрәкова, ысынлап та, Хоҙай һөкләнһындар өсөн яратҡан ҡатын-ҡыҙ. Тормоштоң үҙе кеүек ябай шиғыр, әммә бына шулай ғәҙәти, ябай һәм асыҡ итеп яҙыу ихлас һәм игелекле булыу кеүек үк ауыр ул.

СССР-ҙың халыҡ артисткаһы, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, мәшһүр актриса Гөлли Мөбәрәкова хаҡында уның оҙайлы һәм бай ижад юлы дауамында бик ҙур һүҙҙәр әйтелгән, эшенә абруйлы сәхнә белгестәре баһа биргән, шағирҙар шиғри тел менән әйтһә, тамашасы уға ихлас алҡыштар һәм тере сәскәләр гөлләмәһе бүләк итеп, мөхәббәтен белдергән. Улар барыһы ла актрисаға ижад дәрте, йәшәү йәме бүләк итә.

Гөлли Мөбәрәкованың ижады — профессионаллек үрнәге, тигән һүҙҙәр сәнғәткә мөкиббән ғашиҡ кешеләрҙең һәр саҡ күңел түрендә. Уның рухи асылы — ярһып, бирелеп сәхнәлә уйнауында ғына түгел, ҡайнар ҡанында, хисле күңелендә, тойғоло йөрәгендә, аң-аҡылында, фекер йөрөтөү офоҡтарының киңлегендә. Күренекле актрисаның күркәм юбилейы уңайынан һүҙебеҙ ошо хаҡта.

М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының һуңғы дүрт тиҫтәнән ашыу ижад миҙгелен Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкованан башҡа күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Ул бала сағынан уҡ ҡатмарлы һәм серле театр донъяһында. Халҡыбыҙҙың һөйөүен яулаған абруйлы һәм күренекле артистар Арыҫлан Мөбәрәков һәм Рәғиҙә Янбулатованың ҡыҙы ул. Данлыҡлы ата-әсәһенең юлын һайлап, Гөлли Мөбәрәкова башҡорт сәхнәһендәге үҙенсәлекле ижады менән был династияның мәртәбәһен тағы ла арттырҙы. "Мин үҙемде театрҙа тыуған кеше тип һанайым. Беренсе тапҡыр күкрәк һөтөн татығанмын, тәпәй баҫҡанмын, тәүге аҙымдарымды ла театрҙа яһағанмын", — ти актриса.

Гөлли Арыҫлан ҡыҙының сәхнә сәнғәтенә һөйөүе, инанғанлығы, тоғроլоғоноң тамырҙары шулай уҡ ғәжәйеп талантлы оло быуын актерҙары менән бер арауыҡ күрешеп ҡалыуҙа ла. Бәҙәр Йосопова, Ғәлимйән Ҡарамышев, Әмин Зөбәйеров, Хажи Бохарский, Таңһылыу Рәшитова, Вәли Ғәлимов, Зәйтүнә Бикбулатова һәм башҡа бик күптәр сәхнәгә сикһеҙ мөхәббәтте эстафета итеп тапшырған актрисаға. Башҡорт милли мәҙәниәтенә үҙенең бөтә ғүмерен бағышлаған, уға арыу-талыуһыҙ хеҙмәт иткән абруйлы, сабыр, оло йөрәкле, нескә рухлы Гөлли Мөбәрәкова оло быуын ижадсыларының традицияларын дауам итеп, уларҙы бөгөнгө йәштәргә еткереүсе сағыу йәйғор нуры кеүек.

1959 йылда Мәскәүҙең А.В.Луначарский исемендәге театр сәнғәте институтын тамамлағандан һуң башлай ул үҙенең ижад юлын төп милли сәхнәбеҙҙә. "Иң тәүге ролем "Туҡай" исемле спектаклдә бәләкәй ҡыҙ — Сара роле ине. Өс минутлыҡ ҡына роль. Был сәхнә сәнғәтенә тәүге аҙымым һәм тәүге баҫҡысым булды", — тип хәтерләй актриса.

Эйе, театрҙа уны яраталар, үҙ итәләр, ышаналар, ролдәр бирәләр. Йәш актриса өсөн ул йылдарҙа уҡ, иң беренсе сиратта, кеше күңелендәге борсолоуҙар, донъяның мәңгелек хәрәкәте, персонаждарҙың рухи тормошо ниндәй булыуы, уның уй-фекерҙәре — барыһының да сәхнәлә тулы сағылыш табыуы мөһим була. Әйтәйек, А.Арбузовтың ”Эҙләнеү йылдары”нан Оля роле тамашасы хәтерендә оҙаҡ һаҡлана. М.Горькийҙың ”Һуңғылар” драмаһындағы Любовь роле актрисаға тамашасы алдында танылыу алып килә. Артабан уны һиҙҙермәй генә уҙып барған ғүмер миҙгелдәре ҡыҙыҡһындыра, актрисаның тормошсан дөрөҫлөк менән психологик башланғысты бергә үреп бирә алыу һәләтенә эйә булыу маһирлығы асыҡлана.

”Актрисаның тәүге ролдәре уның артабанғы репертуарын һәм ижад үҙенсәлектәрен билдәләй”, — тип яҙа белгестәр. Вольтерҙың ”Мөхәммәт” трагедияһынан Пальмира, М.Кәримдең ”Ай тотолған төндә” әҫәренән Шәфәҡ, И.Йомағоловтың ”Нәркәс” трагедияһынан Нәркәс, С.Айтматовтың ”Әсә—Ер-әсә” әҫәре буйынса ҡуйылған спектаклдә Әлимә ролдәре ул йылдарҙа милли театр сәнғәтенең ҙур ҡаҙанышы иҫәпләнә, уларҙа образлы башланғыс беренсе планға сығарылып, теүәллек сифаты өҫтөнлөк ала.

Г.Мөбәрәкованың артабанғы ижадында был сифаттар тағы ла үҫтерелә. Актерлыҡ оҫталығы образдан-образға шымара. М.Кәримдең ”Йәйәүле Мәхмүт”ендә — Мәҙинә, ”Салауат”та — Гөлнәзирә, Н.Хикмәттең ”Сәйер кеше” драмаһында — Хәлиҙә, Х.Ибраһимовтың ”Башмағым” музыкаль комедияһында — Сәрүәр, Ғ.Ҡотойҙың ”Тапшырылмаған хаттар”ында өлкән Ғәлиә һәм башҡа ролдәр уның талант сиктәрен киңәйтте.

”Г.Мөбәрәкованың ролдәре психологик тәрәнлеге һәм фекер киңлеге, ҡыйыулығы менән айырылып тора. Уның уйыны — башҡорт сәхнәһе-



*Т.Таһиров, ”Ғәлиә”. Сәсәкәй әбей — Г. Мөбәрәкова, Заһир — Ф.Ғафаров*



*Н.Асанбаев, ”Аҡ сирендәр”.*
*Нәзифә — Г. Мөбәрәкова*

нең һуңғы йылдарҙа яулаған иң юғары ҡаҙаныштары менән бәйле. Классик һәм заманса трагедияларҙы иң юғары кимәлдә яңғырата алырлыҡ сәхнә оҫтаһы ул”, — тип яҙҙы ул йылдарҙа үҙәк театр баҫмалары.

1970—1980 йылдарҙа Ә.Мирзаһитовтың ”Әсәләр көтәләр улдарын” (Г.Мөбәрәкова — Хафаса), М.Кәримдең ”Ташлама утты, Прометей!” (Агазия) һәм ”Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесы буйынса ҡуйылған ”Яҙмыштарҙан уҙмыш бар” (Р.Исрафилов инсценировкаһы, Оло инәй) спектаклдәре ул осорҙағы башҡорт сәхнәһенең рухи бейеклеген сағылдырған әҫәрҙәр булды. Кешелек донъяһы проблемалары хаҡында уйланыу, нескә психологик-лирик күренештәрҙе театраль метафораның көсөргәнешле драматизмы менән тоташтырыуҙар уларҙа айырыуса асыҡ сағылды.

1981—1996 йылдарҙа театрҙың художество етәксеһе булып эшләгән режиссер Рифҡәт Исрафилов ҡуйған спектаклдәрҙә Гөлли Мөбәрәкованы тамашасы Ф.Кроммелинктың ”Иҫ китмәле мөгөҙлө шәп ир” әҫәрендә — Һөт инәһе, Ф.Бүләковтың ”Бибинур, ах, Бибинур”ында — Миңниса, Ә.Атнабаевтың ”Ул ҡайтты”һында Шәмсинур ролдәрендә һәм башҡа бик күп образдарҙа күрҙе. Ә Ә.Мирзаһитовтың ”Әсәләр көтәләр улдарын” драмаһындағы (режиссеры Р.Исрафилов) Хафаса роле өсөн актриса республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды (1976). Тормошта күпте күргән, сал сәсле, күркәм холоҡло Хафаса һуғышта ирҙәрен, ул һәм ҡыҙҙарын юғалтҡан, ғүмер буйы уларҙы юҡһынып ғазапланыусы моңлағән әсәләрҙең дөйөмләштерелгән образы. 35 йәшлек кенә Гөлли Мөбәрәкованың ябай ауыл әбейе образын хайран ҡалырлыҡ оҫта башҡарыуы әле лә күптәрҙең күҙ алдында. ”Хафаса-Мөбәрәкова беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа йәшәй, был — тормоштоң үҙе!” — тип яҙғайны бер мәл ошо спектаклдән һуң шағир һәм ғалим Ғилемдар Рамазанов ”Совет Башҡортостаны” гәзитте биттәрендә.

Актриса Гөлли Мөбәрәкова башҡарған ролдәрҙе, спектаклдәрҙең режиссерҙарын, ижад коллективының ул йылдарҙағы етәксеһен атап үтеүем осраҡлы түгел. Сөнки СССР-ҙың халыҡ артисткаһы тигән дәрәжәгә күтәрелгән мәшһүр актрисаға театр тарихындағы ҡатмарлы



*М.Горькийҙың ”Һуңғылар” драмаһынан күренеш. Люба — Г. Мөбәрәкова, Яков — Х.Яруллин*

осорҙа, дөрөҫөрәге, театр һәм ил тарихындағы ”бөйөк боролоштар” заманында театр менән етәкселек итеп алырға ла тура килде. Бөтә өлкәләрҙе көрсөккә терәгән заман зандары театр сәнғәтен дә урап үтмәне, 1993 йылда театрҙа янғын сығып, үҙ бинаһын юғалтҡас, коллектив иңенә төшкән драматизм уғата ҡырҡыулашты. Ошо ҡатмарлы һәм ауыр осорҙа театр үҙенең абруйлы актрисаһы етәкселегендә эшләй һәм һынатмай.

Бөгөн дә актриса тамашасыһы менән көн дә осраша, сәхнә аша инде өлкән йәштәге (”Башмағым” — Сәрби, ”Аты барҙың дәрте бар” — Балбикә, ”Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” — Оло инәй, ”Сәсәндәр”ҙә Ил инәһе һәм башҡалар) образдарҙы театр һөйөүсе күңеленә еткерә. Шулай уҡ бөтөнләй көтөлмәгән характерҙағы, комик образдарҙа ла күрергә мөмкин уны (Ю.Болат, ”Мәһәре — байҙан”да Фәрештә һәм башҡалар).

Билдәле актер һәм драматург Илшат Йомағоловтың ”Сәсәндәр” трагедияһының сәхнә күреүе һуңғы йылдар башҡорт әҙәбиәте һәм театр сәнғәтендә оло ваҡиға булды. Пьеса иғтибарҙы тәү нәүбәттә юғары художестволы драма әҫәре булараҡ йәлеп итә. Идея-тематикаһы (илкөн яҙмышы, сәсәндәр ижады) менән бер кемде лә битараф ҡалдырмай. И.Йомағоловҡа ғына хас тел байлығы, фекер киңлеге был әҫәрҙе юғары трагедиялар рәтенә ҡуя.

”Сәсәндәр”гә мәртәбә өҫтәүсе тағы бер үҙенсәлек — төп герой. Ил инәһе — ил, халыҡ яҙмышын аҡыл-зиһененә, тәжрибә һәм аҡһаҡалдар фекеренә таянып, ҡурсаларға тырышҡан, һүҙе менән дошман, йыры менән ғәскәр йығырлыҡ сәсәндәр тәрбиәләргә ынтылыусы ҡатын-ҡыҙ. Ҡоростай ныҡ рухлы, һәр әйткән һүҙе уйланған, ил тип янған Ил инәһе — юғары ҡатын-ҡыҙ образы — тәрән милли образ тыуҙырҙы Гөлли Мөбәрәкова был трагедияла.

Бөгөн Гөлли Мөбәрәкова Башҡорт милли театр сәнғәтенең генә түгел, бөтә төрки донъяһы һәм Рәсәй театр сәнғәтенең сағыу йондоҙо. Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры бу-



*Алкыштар, алкыштар...*

лараҡ, бер нисә быуын артистар тәрбиәләне һәм тәрбиәләй. Мәшһүр сәхнә оҫтаһы Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкова ижадта ғына түгел, халҡыбыҙ тормошонда ла рухи таяныс һәм тәрбиәсе.

Йәмғиәттең үҫешен һәм мәҙәнилеген күрһәтеүсе төп сифат — ул ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәт. Сәхнәне күтәреп, тамашасыһына ғүмере буйы тоғро ҡалып, халҡына арымай-талмай хеҙмәт итеүсе Гөлли Мөбәрәкова үҙе лә яраткан тамашасыһының ҡәҙер-хөрмәтен күреп йәшәй. Юғары исемдәре лә быға дәлил — Гөлли Арыҫлан ҡыҙы баш ҡалабыҙ Өфөнөң почетлы гражданы.

Мәшһүр актриса йөҙөндә Башҡорт дәүләт академия драма театрының бөгөнгө барлыҡ асылы сағыла кеүек.

Эйе, актерлыҡ — оҫталыҡ. ”Күктәр бышылдаған” һүҙҙе тыуған ерҙең, халыҡтың күңел һандығына урынлаштыра алыу сәнғәте лә ул. Ә инде был һүҙҙең ынйылай балҡыуын күреүсе, ишетеүселәрҙең булыу-булмауы кешелектең үҙенән тора. Шөкөр, талантарын ҡәҙерләй белә халҡыбыҙ.

Мин башҡорт милли театр сәнғәтенең генә түгел, бөтә илебеҙ күләмендә киң билдәле Актриса Гөлли Мөбәрәкованы яҡындан белеүем менән бәхетлемен. Ул шундай наҙлы, күркәм, һөйләшкәндә һәр һүҙе яғымлы һәм сихәтле булып йөрәккә ята. Һәр хәрәкәте, бар булмышы ыҫпай, нәзәкәтле. Донъяла шундай гүзәл ҡатын-ҡыҙҙар йәшәүенә, уларҙың йәш һәм һылыу килеш ҡала алыуына һоҡланаһың. Ул һөйләй. Уның алһыу йөҙөнән, етди ҙә, уйсан да, мөләйем дә ҡарашынан зыялылыҡ бөркөлә, күкрәк моңо менән әйткән һәр бер һүҙе йөрәгеңде илһам ләззәтенә күмә, гүйә ул үҙе лә күңелеңдең ни теләгәнен белә. Уның янында һин бүтән, һин юғары — ул гөл илендә тыуғанға шулайҙыр.